**МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ**

**Министерства образования и науки Республики Башкортостан**

**Муниципальное казенное учреждение отдел образования**

**муниципального района Учалинский район Республики Башкортоста**

**МБОУ СОШ с.Сафарово муниципального района Учалинский райо**

| | | |
|---|---|---|
| АССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДЕНО |
| уководитель ШМО | Заместитель директора по УВР | Директор |
| Р.Кадырова<br>ротокол №1 от «30» уста 2023г. г. | Л.Ф. Шарафутдинова<br>Протокол № 1 от «30» августа 2023 г. | И.В.Киньякаев<br>Приказ № 49<br>от «1 » сентября 2023 г. |

РАБОЧАЯ ПРОГРАММА

учебного предмета

**«Литературное чтение народном (башкирском) языке»**

для обучающихся 1-4 классов

**Учалы 2023 год**

**Аңлатмалы яҙыу**

“Башҡорт” һәм”Әҙәби уҡыуҙан” эш программаһы Рәсәй Федерацияһының дөйөм белем биреү буйынса икенсе быуын дәүләт стандарттары талаптарына, милли мәктәптәр өсөн эшкәртелгән уҡыу планына таянып ҡоролдо.(приказ№373 06.10.2009 йылдан)Программаның нигеҙенә Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланылған Программа алынды, авторҙары Ф.Ш. Сынбулатова, Г. Ә. Вәлиева.

Эш пограммаһы 2023-2024 уҡыу йылына Комсомольск урта дөйөм белем биреү мәктәбе муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһының «Уҡыу планы»на ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыла

Был эш программаһы федераль һәм республика закондары талаптарына таянып эшләнде: «Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы; Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы; «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы; Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы; Башҡортостан Республикаһында Милли мәғарифты үҫтереү концепцияһы.

Программа кимәле: базис

Программа бер йыл осорға тәғәйенләнелә.

Быйылғы уҡыу планы буйынса грамотаға өйрәтеү «Әлифба» һәм башҡорт теле аҙнаға 2сәғәт ,әлифба 50сәғ.,башҡорт теле16сәғ.,
бөтәһе 66 сәғәт.

Эш программаһы дәреслектәге тел ғилеменең бөтә бүлектәренә ярашлы бирелгән сәғәттәр һаны иҫәпкә алынып йыллыҡ план төҙөлдө.

Башҡорт грамотаһына өйрәтеү һәм башҡорт телен өйрәнеү түбәндәге **маҡсаттарҙы** ҡуя:

- тыңлау,ишетеү,һөйләү,уҡыу һәм яҙыу күнекмәләренә эйә булыу;
- лексика,фонетика,грамматика,синтаксис өлкәһендә башланғыс тел төшөнсәләрен,күренештәрен,ҡанундарын үҙләштереү;
- башҡорт телендә – республиканың дәүләт телендә – аралашырға,үҙ-ара мөнәсәбәт ҡорорға өйрәнеү;
- башҡорт теле аша халыҡтың мәҙәниәтен өйәнеү һәм үҙләштереү.

Рәсәй мәғарифын модернизациялау концепцияһында мәғариф алдында ҡуйған төп маҡсат- баланы шәхес итеп үҫтереү. Рәсәй Федерацияһының мәғарифты үҫтереү программаһында ла «Дөйөм белем биреү мәктәбен модернизациялау нигеҙҙә уҡыусыларға билдәле күләмдә белем биреүҙе генә күҙ уңында тотмай, ә уны шәхес булараҡ үҫтереү, танып белеү һәм эшмәкәрлек һәләттәрен күреү» ҡыҙыл һыҙыҡ өҫтөнә алынған. Шул маҡсаттан сығып башҡорт телен уҡытыуҙың төп **мәсьәләләре** билдәләнде:

-телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу: тыңлау, һөйләү, уҡыу, яҙыу,

-тел системаһын (фонетика, лексика, орфография, орфоэпия, грамматика, пунктуация) өйрәнеү,

-башҡорт теле фәне аша тирә-яҡты, йәғни баланы уратып алған мөхитте, объекттарҙы, күренештәрҙе танып белергә өйрәтеү,

-башҡорт теле ғилемен өйрәнгәндә баланың шәхси мөмкинселектәрен иҫәпкә алып, уның һәләтен,эрудицияһын формалаштырыу өсөн шарттар тыуҙырыу,

-тел ғилемен өйрәнеү процесында универсаль уҡыу эш төрҙәренә өйрәтеү; уҡыу эшмәкәрлегенең төп компоненттарын үҙләштереү (уҡыу мәсьәләһе, проблема ҡуйыу; эште планлаштырыу, ойоштороу; уҡыу мәсьәләһен сисеү; эште баһалау; рефлексив-контроль эшмәкәрлек);

-милли үҙаңды формалаштырыуға нигеҙ һалыу.

**Уҡыу йылы аҙағына планлаштырылған һөҙөмтәләр.**

Башҡорт теле программаһын өйрәнеү процесында уҡыусы өйрәнергә тейеш:

*Шәхси үҫеш кимәле:*

Уҡыусы статусын ҡабул  итергә, уҡыу эшмәкәрлегенә өйрәнергә. Тыуған илгә, ергә, телгә, яҡын кешеләргә һөйөү тәрбиәләргә. Эшләгән эштәр, ҡылыҡ-фиғел өсөн яуаплылыҡ тойорға. Һау-сәләмәт йәшәйеш булдырырға.

*Предмет кимәле:*

- тел берәмектәрен айыра белергә (һүҙ, һүҙбәйләнеш, һөйләм, өн, хәреф);
- һүҙ, һүҙбәйләнеш, һөйләмде график-символик тамға ярҙамында тамғаларға;
- уҡырға(минутына 40-45 һүҙ);
- хәрефтәрҙе тейешле каллиграфик режимда яҙырға, уларҙы бер-береһе менән дөрөҫ тоташтырырға;
- һүҙ, һөйләм, текст уҡырға һәм яҙырға;

-3-4, 5-6 хәрефтән торған ябай ғына һүҙҙәрҙе грамоталы яҙырға;

- һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылыш ҡағиҙәләрен (орфограмма) (ҙур хәреф - кеше исем-фамилиялары, һүҙ башында в - [уы], [уэ] һәм я,е,ю,ё
хәрефтәре; йә,йо,йу,йы, йө ҡушымсалары) белергә;

*Метапредмет кимәле:*

- уҡытыусыны тыңларға, уның әйткәнен ишетергә;
- өндәрҙе әйтергә, тыңларға, сағыштырырға, анализларға;
- уҡытыусыға һорау бирергә, белешмә алырға;
- икешәрләп йәки төркөмләм класташтары менән эшләргә;
- диалог барышында һөйләшеүҙә ҡатнашырға, уның темаһын күҙ уңында тотоп, үҙ фекерен әйтергә, кешенекен тыңларға;
- дәрестең темаһына ярашлы уҡыу мәсьәләһе ҡуйырға, уны сисеү максатында тикшереү эшендә әүҙем ҡатнашырға;
- график-символик һыҙмаларҙы танырға: һүҙҙҙең өн(хәреф) моделен, һөйләмдең һыҙмаһын төҙөргә һәм уҡырға;
- уҡыу һәм яҙыуҙы мәғлүмәт, белем алыу мөмкинселеге итеп ҡулланырға.

**Программа  йөкмәткеһе.**

Грамотаға өйрәтеү. Әлифба

Графика. Өн һәм хәреф. Үпкәнән килә торған һауа ағымының кәртәгә осрауы һәм осрамауына ҡарап, өндәрҙең һуҙынҡыларға һәм тартынҡыларға бүленеше. Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар. Парлы һәм парһыҙ, яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар. Ҡ, к, п өндәренең ғ, г, б өндәре менән сиратлашыуы. Һүҙҙә нисә өн һәм нисә хәреф барлығын билдәләү. Өн һәм хәрефтең бер-береһенә тура килмәгән осраҡтарын билдәләү һәм күрһәтеү. һүҙҙәрҙе ижеккә бүлеү. Баҫым. Алфавиттағы хәрефтәр тәртибе.

Һүҙ. Балаларға таныш предметтарҙы: уйынсыҡтар, уҡыу кәрәк-яраҡтары, өҫ-баш кейемдәре, йәнлектәр, үҫемлек һ. б. дөйөм исем аҫтында туплатыу. Һүҙҙәрҙе, мәғәнәләренә ҡарап, кем? нимә? ни эшләй? ниндәй? һорауҙары буйынса төркөмләү, уларҙы һөйләмдән табып, һорау ҡуйыу, телмәрҙә ҡулланыу.

Һөйләм. Телмәрҙән һөйләмде айырып  алыу. Бирелгән һүҙҙәр менән, картиналар һәм һүрәттәр буйынса һөйләмдәртөҙөү. Һөйләмдең беренсе һүҙен баш хәреф менән яҙыу. Һөйләм аҙағында нөктә (йыл аҙағында - һораү һәм өндәү) билдәләре ҡуйыу.Шиғыр, хикәйә, йыр, әкиәт, мәҡәл, йомаҡ кеүек жанрҙарҙы айырыу.

Башҡорт теле

Фонетика. Әлифба осоронда «Өн һәм хәреф» темаһы буйынса алған белемдәрҙе системаға килтереү. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр. Нәҙек һәм ҡалын һүҙҙәр. Уларҙы тамғалау. Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар. Ижек. һүҙҙе ижеккә бүлеү. Һүҙҙе юлдан юлға күсереү.

Һүҙ башында э хәрефе. Һүҙ уртаһында е хәрефе. Й хәрефенең яҙылышы. Йо, йө, йе, йү, йы, йә ҡушымсалары. Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә е, ё, ю, я хәреф-тамғалары. У-ү хәрефле һүҙҙәр.

Һүҙ. Предметтың атамаһын белдергән һүҙҙәр. Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр. Предметтың хәрәкәтен (эшен) белдергән һүҙҙәр. *Һәм, менән, да-дә, ҙа-ҙә, ла-лә, та-тә, ғына-генә, кына-кенә* ярҙамсы һүҙҙәре.

Һөйләм. һорау һөйләм. Өндәү һөйләм. Хәбәр һөйләм. О-ө хәрефле һүҙҙәр. Һөйләмдең сиктәрен билдәләү.

Орфография һәм пунктуация. Кешенең исем- фамилияларын, хайуан ҡушаматтарын һәм ер-һыу атамаларын ҙур хәреф менән яҙыу. Ярҙамсы һүҙҙәрҙең айырым яҙылыуы.

Универсаль уҡыу эш төрҙәре. Уҡыу эшмәкәрлегенә өйрәнеү. Хәреф һәм өндәрҙе таныу.

Ижектәрҙе һәм һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе ҡушып уҡыу. Текстарҙы аңлы һәм тасуири уҡыу.

Хәрефтәрҙе айырым һәм бер береһе менән тоташтырып яҙыу. Һүҙ һәм һөйләмдәрҙе, ҡыҫҡа текстарҙы күсереп яҙыу. Ишеткәнде яҙыу (диктант). Уҡытыусы ҡуйған һорауға тулы һәм асыҡ яуап биреү, дәрестә иғтибар менән тыңлау, уҡытыусы ҡушҡанды аңларға өйрәнеү. Үҙ-ара һөйләшеү (диалог) ҡороу. Тел күренештәрен күҙәтеү, сағыштырыу, анализлау һәм һығымта яһау. Үҙ аллы белем алырға өйрәнеү. Уҡытыусы ярҙамында маҡсат ҡуйыу. Эште планлаштырыу һәм уның буйынса эшләү. Тикшереү. Эште баһалау

**Уҡыу – уҡытыу методик ҡулланмалар исемлеге**

| 1-се класс | |
|---|---|
| **Уҡытыусы өсөн** | **Уҡыусы өсөн** |
| а” дәреслегенә методик ҡулланма Өфө.Китап 2022 ( автор улатова,Иҡсанова Р.М.)<br>рт теле” дәреслеге ( автор Ф.Ш.Сынбулатова һ.б.) 2022 | • “Әлифба”китабы(авторФ.Ш.Сынбулатова. Исламғолова Ы.Ә,Йәйҡарова З.И)Өфө.Китап.2<br>• “Башҡорттеле”дәреслеге(авторФ.Ш.Сынбула Өфө.Китап2022 |

| | |
|---|---|
| латова Ф.Ш.,Вәлиева Г.Ә Яңы стандарттар буйынса дөйөм ү мәктәптәренең 1-4 –се кластар өсөн «Әлифба»һәм“Башҡорт ҡыу программаһы, Өфө: Китап, 2015<br>уҡыу(автор Сынбулатова Ф.Ш.,Атнағолова С.В,Кәримов С.Ғ ,2022.<br>**Өҫтәлмә әҙәбиәт**<br>нат баланы.Т.Х.Аслаев,Ы.Ә.<br>ифба Д.Талхина,Өфө.Китап.2009<br>остан уҡытыусыһы», «Аҡбуҙат», «Аманат» журналдары; ә” гәзиттәре.<br>минуттар.М.И.Баһауетдинова,Г.Н. Йәғәфәрова Өфө.Китап<br><br>әреслегенән электрон дәреслек<br>халыҡ ижады” китаптары | • Әҙәби уҡыу дәреслеге (автор Сынб Ф.Ш.,Атнаголова С.В.)Өфө.Китап 2022 |

**Техник ҡулланмалар:**

- Класс таҡтаһы;
- Ноутбук;
- Мультимедиялы проектор;
- экран

Йыһазландырыу

- Күргәҙмә материалдар, һүрәттәр

**Сан Пин 2.4.11.17-02 нормаһы буйынса 1 класта билдә ҡуйылмай.**

**1- 4 –се класс уҡыусыларының башкорт теле буйынса белемдәрен,белеүҙәрен (умение) һәм күнекмәләрен баһалау нормалары**

**Телдән яуаптарҙы баһалау:**

Уҡыусыларҙың телдән һөйләмен, унын фонетик, грамматик яғы менән бер рәттән тасуири уҡыуы ла иҫәпкә алына. Телдән һорау формаһында үткәрелә торған күнегеүҙәр һәр дәрестә алып барыла.

*Тыңлап аңлау күнекмәләрен баһалау:*

1. “тулыһынса аңланы”
2. “өлөшсә аңланы”
3. “аңламаны”

*Уҡыусының монологик һөйләүен баһалау:*

1. - тәҡдим ителгән тема ( рәсем, ситуация) буйынса хикәйә төҙөй белһә;
   - дөрөҫ интонация менән, тулы, эҙмә-эҙлекле итеп, тексҡа баһа биреп, мөнәсәбәтен күрһәтеп һөйләй алһа;
   - тупаҫ булмаған пауза хаталары ебәрелһә лә, **“5”ле** ҡуйыла.

   *4 -се класта бәйләнешле һөйләм – 10-12 һөйләмдән тәшкил итә.*
2. - айырым паузалар, 1-2 һөйләм хатаһы яһаһа;
   - уҡытыусы тарафынан икенән артыҡ булмаған асыҡлаусы һорау бирелһә,”**4” ле** ҡуйыла
3. - теманың төп йөкмәткеһен асһа;
   - 4-6 һөйләм хатаһы ебәрһә;
   - уҡытыусы тарафынан икенән артыҡ асыҡлаусы һорау бирелһә йәки уҡытыусы ярҙамынан башҡа йөкмәткеһен һөйләй башлай(тамамлай) алмаһа, **“3”лө** ҡуйыла.
4. - һөйләгәндә эҙмә-эҙлеклелек һаҡланмаһа;
   - паузаларға теүәлһеҙлектәр китһә;
   - 6- нан артыҡ һөйләм хатаһы һәм грамматик хата яһаһа, “**2”ле** ҡуйыла.

*Диалогик һөйләмде баһалау:*

1. - тейешле темпта дөрөҫ интонация менән һорау ҡуйһа;
   - әңгәмәләшенең һорауҙарына тулы яуап ҡайтарһа, “**5”**ле ҡуйыла
2. - дөрөҫ һорау биреп, үҙе лә әңгәмәләшенең һорауына яуап бирһә, ләкин һөйләү ваҡытында уҡытыусы ярҙамына мохтаж булһа;
   - 2-3 һөйләм хатаһы ебәрһә, “**4”** ле ҡуйыла.
3. - уҡытыусы ярҙамында ғына һорау бирһә ;
   - һорауҙар биргәндә, һүҙҙәр һәм грамматик формалар табыуға теүәлһеҙлектәр ебәрһә йәки өйрәнгән теманың бер өлөшөн генә үҙләштерһә;
   - 4-5 һөйләм хатаһы ебәрһә, **“3**” лө ҡуйыла.
4. - әңгәмә ваҡытында ҙур ауырлыҡ менән генә һорау бирһә;
   - һорауҙарға үҙ көсө менән яуап бирә алмаһа;
   - 6- нан артыҡ хата ебәрһә, “**2**” ле ҡуйыла.

*Диктанттарҙы баһалау*

Уҡытыусы башта тексты уҡып сыға. Өйрәнелмәгән орфограммалы һүҙҙәр алдан уҡ таҡтала яҙылған булырға тейеш. Уҡытыусы синыфтың әҙерлегенә ҡарап, әйтеп яҙҙырыу темпын үҙе билдәләй.

Тексты орфоэпия, әҙәби тел нормаларына ярашлы уҡыу талап ителә. Уҡытыусыға ярҙам итеү маҡсатында йыйынтыҡ авторҙары текстар аҙағында грамматик эш төрҙәре тәҡдим иттеләр.

Диктант яҙылып бөткәс, уҡыусыларға тексты уҡып һәм тикшереп сығыу рөхсәт ителә. Ләкин диктантты баштан уҡ уйлап, аңлап, иғтибарлы яҙырға өйрәтергә һәм һуңғы тикшертеү менән мауыҡмаҫҡа кәрәк. Уҡытыусы тексты икенсе тапҡыр тулы килеш уҡып сыҡҡас та, грамматик эш тәҡдим ителергә тейеш.

*Контроль диктантты тикшергәндә, түбәндәге хаталар төҙәтелә, ләкин баһалағанда иҫәпкә алынмай:*

1) мәктәп программаһына индерелмәгән ҡағиҙәгә яҙылыштар;

2) әле үтелмәгән ҡағиҙәгә яһалған хаталар;

3) автор ҡуйған ҡатмарлы пунктуацияға хаталар;

4) механик рәүештә бер хәреф урынына икенсеһен яҙыу (мәҫәлән: *ата* урынына *аша).*

Диктантҡа билдә ҡуйғанда шулай уҡ хаталарҙың характерына иғтибар итергә кәрәк. Хаталарҙы иҫәпләгәндә тупаҫ булмағандары, йәғни грамоталылыҡты билдәләү өсөн әһәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә. Быңдай хаталарҙың икеһе берәүгә иҫәпләнә.

*Түбәндәге хаталар тупаҫ булмаған хаталарға инә:*

1) ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәләренә ҡараған хаталар;

2) бәйләү юлы менән яһалған ҡушма яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышына хаталар;

3) бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу;

4) үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ялғауҙары яҙылышына хаталар.

*Диктант бер генә билдә менән баһалана.*

*«5» билдәһе* — тупаҫ булмаған 1 орфографик, 2 пунктуацион хата булған эшкә,

*«4» билдәһе* 4 орфографик, 3 пунктуацион йә 1 орфографик, 6 пунктуацион, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 5 орфографик хаталы эшкә лә «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

«3» билдәһе 6 орфографик, 6 пунктуацион йә 3 орфографик, 9 пунктуацион, йә 12 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктуацион хаталы эшкә лә «3» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

*«2» билдәһе* 9 орфографик, 9 пунктуацион йә 8 орфографик, 10 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Хаталар һаны 15 орфографик хатанан да артып китһә, «1» билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.

Әгәр контроль диктанттан һуң өҫтәмә грамматик, орфографик, лексик эштәр тәҡдим ителһә, уларҙың һәр береһе айырым баһалана.

*Грамматик биремдәрҙе баһалағанда* түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәҡдим ителә:

*«5» билдәһе* бөтә эште лә теүәл йә бер хата булғанда,

*«4» билдәһе* эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнгәндә,

*«3» билдәһе* яртыһынан әҙерәге дөрөҫ әшләнгәндә,

*«2» билдәһе* бер эш тә дөрөҫ эшләнмәгәндә ҡуйыла.

*Иншаларҙы һәм изложениеларҙы баһалау*

Инша һәм изложениелар яҙҙырыу аша уҡыусыларҙың:

1) теманы аса белеүе,тел сараларын инша йәки изложениеның темаһына һәм уларҙағы төп фекерҙе аңлатыу бурыстарына ярашлы һайлай белеүе,
2) яҙғанда,грамматик нормаларға һәм дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләренә таянып эш итеүе тикшерелә. Шуның өсөн иншаға ла,изложениеға ла һәр ваҡыт ике билдә ҡуйыла.Беренсе билдә менән- уларҙың йөкмәткеһе һәм телмәр төҙөлөшө,икенсе билдә менән грамоталылыҡ кимәле баһалана.

| Баһаларҙың төп критерийҙары | | |
|---|---|---|
| Йөкмәтке һәм телмәр төҙөлөшө | Грамоталылыҡ | Баһалау |
| 1.Яҙма эштең йөҡкмәткеһе тулыһынса темаға тура килһә,<br>2. Фактик хата булмаһа,<br>3.Йөкмәтке эҙмә-эҙлекле бирелһә (план буйынса йәки планһыҙ),<br>4. Эш лексик яҡтан бай булыуы менә айырылып торһа,<br>5.Эш темаға һәм төп фекерҙе аңлатыу маҡсатына ярашлы стилдә ябылһа,телмәре тасуири булһа,<br><u>Иҫкәрмә.</u> Бер генә телмәр хатаһы һәм бер генә йөкмәтке хатаһы булған яҙма эшкә «5» билдәһе ҡуйырға мөмкин. | Яҙма эштә 1 орфографик,йәки 1 пунктуацион,йәки 1 грамматик хата | **«5»** билдәһе ҡуйыла |
| 1. Эштең йөкмәткеһе темаға тура килһә (теманан ситкә китеү бик аҙ булһа),<br>2. Йөкмәтке, дөрөҫ бирелһә,әммә эштә бик аҙ булһа ла,фактик хаталар осраһа, | Яҙма эштә 2 орфографик һәм 2 пунктуацион хата, йәки 1 орфографик һәм 3 пунктуацион хата булһа,йәки бер орфографик хатаһы ла булмайынса, пунктуацион | **«4»** билдәһе ҡуйыла |

| | | |
|---|---|---|
| 3. Төп фекерҙе аңлатыу эҙмә-эҙлеклегендә тупаҫ булмаған етешһеҙлектәр генә булһа,<br>4. Яҙма эш,синоним һүҙҙәргә һәм синонимик грамматик формаларға бай булһа,<br>5. Эш бер төрлө стилдә яҙылыуы һәм тасуири булыу менән айырылып торһа,<br>Иҫкәрмә. Яҙма эштең телмәр хаталары өстән дә,йөкмәткеһендәге хаталар икенән дә артмаһа,уға «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин. | хаталары 4-тән,һәм грамматик хаталары 2-нән артмаһа, | |
| 1. Яҙма эштә теманан ситкә китеүгә ҡараған етди хаталар булһа,<br>2. Төп фекер дөрөҫ аңлатылһа,әммә эштә фактик хаталар ебәрелгән булһа,<br>3. Айырым өлөштәрендә төп фекерҙе аңлатыу эҙмә-эҙлеклеге боҙолһа,<br>4. Яҙма эш бер төрлөрәк типтағы синтаксик конструкцияларҙан торһа,һүҙлеге ярлы,һүҙҙәрҙе ҡулланыуҙа хаталар булһа,<br>5. Эш тема һәм уны аңлатыу (асыу)талап иткән бер төрлө стилдә яҙылмаһа,<br>Иҫкәрмә. Яҙма эштәге телмәр хаталары<br><br>5-тән ,йөкмәткеләге хаталар 4-тән артмаған хәлдә лә,эшкә **«3»** билдәһе ҡуйырға мөмкин. | Яҙма эштә **4** орфографик һәм **4** пунктуацион хата,йәки 3 орфографик һәм 5 пунктуацион хата, йәки 7 пунктуацион хата һәм орфографик хатаһыҙ булһа,шулар өҫтөнә 4 грамматик хата ебәрелһә, | «**3**» билдәһе ҡуйыла |
| 1. Яҙма эш темаға тура килмәһә,<br>2. Фактик хаталар күп булһа,<br>3. Эштең бөтә өлөштәрендә фекер аңлатыу эҙмә-эҙлеклеге боҙолһа,текст өлөштәре араһында бәйләнеш булмаһа,планға ярашһыҙ булһа, | Орфографик хаталары 7-нән,пунктуацион хаталары 7-нән ,грамматик хаталар ҙа 7-нән артһа, | «**2**» билдәһе ҡуйыла |

| | | |
|---|---|---|
| 4. Эстәлеге ғәҙҙәттән тыш ярлы булһа,эш үҙ-ара бәйләнеше булмаған бер төрлө конструкциялы ҡыҫҡа һөйләмдәрҙән торһа,һүҙҙәр ҡулланышында ла хаталар осраһа,<br>5. Эштә стилдең бер төрлөлөгөнә ирешелмәгән булһа,<br>Иҫкәрмә Яҙма эштәге телмәр хаталары 7-нән,йөкмәткеһендәге хаталар һаны 6-нан артмаған хәлдә лә,уға «2» билдәһе ҡуйырға мөмкин. | | |

**Әлифба. Грамотаға өйрәтеү. Тематик планлаштырыу**

| № | Тема | План буйынса | Фактик үткәреү |
|---|---|---|---|
| | **Грамотаға өйрәтеү ( 50 сәғәт)** | | |
| 1 | Эш дәфтәре менән танышыу. Дөрөҫ ултырыу. Һүрәттәрҙе буяу | 05.09.23 | |
| 2 | Ручканы дөрөҫ тотоу. Һүрәттәрҙе буяу. | 07.09.23 | |
| 3 | Нөктәләрҙе тоташтырыу элементтарына өйрәтеү. | 12.09.23 | |
| 4 | Һүрәттәрҙе буяу, штрихлау | 14.09.23 | |
| 5 | Һүрәттәрҙе буяу, штрихлау | 19.09.23 | |
| 6 | Нөктәләрҙе тоташтырыу элементтарына өйрәтеү | 21.09.23 | |
| 7 | Нөктәләрҙе тоташтырыу элементтарына өйрәтеү | 26.09.23 | |
| 8 | Һүҙбәйләнештең график һыҙмаһын һыҙырға өйрәнеү | 28.09.23 | |
| 9 | Һүрәттәрҙе ситенән йөрөтөү,буяу, штрихлау | 03.10.23 | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 10 | Һөйләмдәрҙең график һыҙмаһын һыҙыу | 05.10.23 | |
| 11 | Ярҙамсы һүҙҙәрҙе һөйләм һыҙмаһында график тамғалау | 10.10.23 | |
| 12 | Һүҙҙәрҙең өн моделен һыҙыу | 12.10.23 | |
| 13 | Һүҙҙәрҙең өн моделен һыҙыу | 17.10.23 | |
| 14 | Хәреф элементарын яҙыу | 19.10.23 | |
| **15** | Хәреф элементарын яҙыу дөрөҫ ауышлыҡта яҙыу | 24.10.23 | |
| 16 | Һаңғырау,яңғырау тартынҡыларҙы график тамғалау | 26.10.23 | |
| 17 | Һүҙҙәрҙең график моделен төҙөү | 07.11.23 | |
| 18 | Әә, Аа хәрефтәрен яҙып өйрәнеү | 09.11.23 | |
| 19 | Әә хәрефен яҙып өйрәнеү | 14.11.23 | |
| 20 | Өө хәрефен яҙып өйрәнеү | 16.11.23 | |
| 21 | Оо хәрефен яҙып өйрәнеү | 21.11.23 | |
| 22 | Үү хәрефен яҙып өйрәнеү | 23.11.23 | |
| 23 | Уу хәрефен яҙып өйрәнеү | 28.11.23 | |
| 24 | Ээ, ы хәрефтәрен яҙып өйрәнеү | 30.11.23 | |
| 25 | Ии,Мм хәрефтәрен яҙып өйрәнеү | 05.12.23 | |
| 26 | Нн,ң хәрефтәрен яҙып өйрәнеү | 07.12.23 | |
| 27 | Лл, Рр хәрефтәрен яҙып өйрәнеү | 12.12.23 | |
| 28 | Йй хәрефтәрен яҙып өйрәнеү | 14.12.23 | |
| 29 | Гг, Кк хәрефтәрен яҙып өйрәнеү | 19.12.23 | |
| 30 | Ғғ,Ҡҡ хәрефтәрен яҙып өйрәнеү | 21.12.23 | |
| 31 | Бб, Пп хәрефтәрен яҙып өйрәнеү | 26.12.23 | |
| **32** | Сс,Зз хәрефтәрен яҙып өйрәнеү | 28.12.23 | |
| 33 | Ҙҙ,ҫ хәрефтәрен яҙып өйрәнеү | 09.01.24 | |
| 34 | Дд хәрефен яҙып өйрәнеү | 11.01.24 | |
| 35 | Дд, Тт хәрефен яҙып өйрәнеү | 16.01.24 | |
| 36 | Жж, Шш хәрефтәрен яҙып өйрәнеү | 18.01.24 | |
| 37 | Жж, Шш хәрефтәрен яҙып өйрәнеү | 23.01.24 | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 38 | Вв хәрефтәрен яҙып өйрәнеү | 25.01.24 | |
| 39 | Фф хәрефтәрен яҙып өйрәнеү | 30.01.24 | |
| 40 | Яя,Ее хәрефтәрен яҙып өйрәнеү | 01.02.24 | |
| 41 | Юю,Ее хәрефтәрен яҙып өйрәнеү | 06.02.24 | |
| 42 | Нәҙек, ҡалын айырыу (ь, ъ) хәрефтәрен яҙыу | 08.02.24 | |
| 43 | Һh, Хх хәрефтәрен яҙып өйрәнеү | 20.02.24 | |
| 44 | Щщ, Чч хәрефтәрен яҙып өйрәнеү | 22.02.24 | |
| 45 | Цц хәрефтәрен яҙып өйрәнеү | 27.02.24 | |
| 46 | Үтелгән хәрефтәрҙе нығытыу, яҙып өйрәнеү | 29.02.24 | |
| 47 | Үтелгән хәрефтәрҙе нығытыу, яҙып өйрәнеү | 05.03.24 | |
| 48 | Өйрәтеү диктанты | 07.03.24 | |
| 49 | Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр.Яңғырау, һаңғырау тартынҡы өндәр | 12.03.24 | |
| 50 | Һүҙҙе ижеккә бүлеү, юлдан-юлға күсереү | 14.03.24 | |
| | **Башкорт теле (16сәғәт)** | | |
| 51 | Баш хәреф | 19.03.24 | |
| 52 | Һөйләм | 21.03.24 | |
| 53 | Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәре | 02.04.24 | |
| 54 | Э хәрефенең яҙылышы | 04.04.24 | |
| 55 | Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә е,ю,я,е хәрефтәре | 09.04.24 | |
| 56 | Ёё, Юю, Яя хәрефтәре | 11.04.24 | |
| 57 | Предметтың атамаһын белдергән һүҙҙәр | 16.04.24 | |
| 58 | Предметтың билдәһен һүҙҙәр | 18.04.24 | |
| 59 | Предметтың хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр | 23.04.24 | |
| 60 | Ярҙамсы һүҙҙәр | 25.04.24 | |
| 61 | Контроль диктант “Тиҙҙән йәй» | 02.05.24 | |
| 62 | Хаталар өҫтөндә эш | 07.05.24 | |
| 63 | Ярҙамсы һүҙҙәр | 14.05.24 | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 64 | Текст күсереп яҙыу | 16.05.24 | |
| 65 | Нығытыу күнегеүҙәре | 21.05.24 | |
| 66: | Йомғаҡлау | 23.05.24 | |

**Әҙәби уҡыу . Тематик планлаштырыу.**

| № | Тема | План буйынса | Фактик үткәреү |
|---|---|---|---|
| | **Хәреф өйрәнеүгә тиклемге осор(14сәғ)** | | |
| 1 | Предмет һәм һүҙ | 04.09.23 | |
| 2 | Предмет. Унының эше, хәрәкәте. | 06.09.23 | |
| 3 | Предмет хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр | 11.09.23 | |
| 4 | Предмет. Унының төҫө, билдәһе. | 13.09.23 | |
| 5 | Һөйләм. Һүҙбәйләнеш. | 18.09.23 | |
| 6 | Һөйләмгә һүҙ өҫтәү | 20.09.23 | |
| 7 | Ярҙамсы һүҙҙәр (һәм, менән, да-дә,ҙа-ҙә,ла-лә, та-тә). | 25.09.23 | |
| 8 | Ярҙамсы һүҙҙәр (ғына-генә,ҡына-кенә). | 27.09.23 | |
| 9 | Өн .Һүҙ. Һүҙҙә нисә өн | 02.10.23 | |
| 10 | Һуҙынҡы,тартынҡы өндәр. Ижек | 04.10.23 | |
| 11 | Нәҙек һәм ҡалын өндәр. | 09.10.23 | |
| 12 | Яңғырау, һаңғырау тартынҡы өндәр. | 16.10.23 | |
| 13 | Баҫым. | 18.10.23 | |
| 14 | Хәреф- өндөң тамғаһы. Һүҙҙең өн моделе. | 23.10.23 | |
| | **Хәреф өйрәнеү осоро(38сәғ.)** | | |
| 15 | [ә], [а] өнө. Әә ,Аа хәрефтәре. | 25.10.23 | |
| 16 | [ө], [о] өнө. Өө, Оо хәрефтәре. | 08.11.23 | |
| 17 | [ү], [у] өнө. Үү,Уу хәрефтәре. | 13.11.23 | |
| 18 | [э], [ы] өнө. Ээ (е), Ыы хәрефтәре. | 15.11.23 | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 19 | [и] өнө. Ии хәрефе | 20.11.23 | |
| 20 | [м], өнө. Мм хәрефтәре | 22.11.23 | |
| 21 | [н] [ң], өнө. Нн, ң хәрефтәре | 27.11.23 | |
| 22 | [л], [р] өнө. Лл, Рр хәрефтәре. | 29.11.23 | |
| 23 | [й] өнө. Йй хәрефе | 04.12.23 | |
| 24 | [г] [к], өнө. Гг, Кк хәрефтәре. | 06.12.23 | |
| 25 | [ғ], [ҡ] өнө. Ғғ, Ҡҡ хәрефтәре. | 11.12.23 | |
| 26 | [г] [к], өнө. Гг, Кк хәрефтәре. [ғ], [ҡ] өнө. Ғғ, Ҡҡ хәрефтәре. | 13.12.23 | |
| 27 | [б] өнө. Бб хәрефе. | 18.12.23 | |
| 28 | [п] өнө. Пп хәрефе. | 20.12.23 | |
| 29 | [б], [п] өнө. Бб,Пп хәрефтәре. | 25.12.23 | |
| 30 | [з] [с], өнө. Зз,Сс хәрефтәре | 27.12.23 | |
| 31 | Зз,Сс хәрефтәре | 10.01.24 | |
| 32 | [ҙ], [ҫ] өнө. Ҙҙ, ҫхәрефе. | 15.01.24 | |
| 33 | [д] өнө. Дд хәрефе. | 17.01.24 | |
| 34 | [т] өнө. Тт хәрефе.<br>Дд-Тт хәрефтәре | 22.01.24 | |
| 35 | у(уы)-ү(үе) тартынҡы өндәр. | 24.01.24 | |
| 36 | [ж], [ш] өнө. Жж-Шш хәрефтәре. | 29.01.24 | |
| 37 | [в] өнө. Вв хәрефе. | 31.01.24 | |
| 38 | [ф] өнө. Фф хәрефе. | 05.02.24 | |
| 39 | Ике өндө[йа] белдергән Яя хәрефе. | 07.02.24 | |
| 40 | Ике өндө[йэ] белдергән Ее хәрефе. | 19.02.24 | |
| 41 | Ике өндө[йу] белдергән Юю хәрефе. | 21.02.24 | |
| 42 | Ике өндө[йо] белдергән Ёё хәрефе. | 26.02.24 | |
| 43 | Нәҙек һәм ҡалын айырйу тамғалары (ь,ъ) | 28.02.24 | |
| 44 | [һ] өнө. Һһ хәрефе. | 04.03.24 | |
| 45 | [х] өнө.Хх хәрефе. | 06.03.24 | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 46 | [ц] өнө. Цц хәрефе. | 11.03.24 | |
| 47 | [ч] өнө. Чч хәрефе. | 13.03.24 | |
| 48 | [щ] өнө. Щщ хәрефе. | 18.03.24 | |
| 49 | Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар | 20.03.24 | |
| 50 | Һүҙ. Һөйләм. | 01.04.24 | |
| 51 | Алфавит | 03.04.24 | |
| 52 | Хәрефтәр иленә сәйәхәт. | 08.04.24 | |
| | **Әҙәби укыу (14сәғ.)** | | |
| 53 | Мин уҡый беләм.” Китап” Д. Талхина | 15.04.24 | |
| 54 | Әкиәт уҡырға яратам. “Айыу ниңә ҡойроҡһоҙ?”Ж.Кейекбаев. | 17.04.24 | |
| 55 | “Тирмә”(Рус халыҡ әкиәте. “Тейен менән бүре”Л.Толстой әкиәте. | 22.04.24 | |
| 56 | Ф.Ш.Сынбулатова. “Атай- ғаиләлә хужа”. | 24.04.24 | |
| 57 | “Атай менән әсәйҙән өйрәнәбеҙ”. Ф. Сынбулатова | 29.04.24 | |
| 58 | “Башаҡ” (Украин халыҡ әкиәте). | 06.05.24 | |
| 59 | “Тәүге дәрес”. С.Кәрим | 08.05.24 | |
| 60 | Әсәйҙәр һәм бәпәйҙәр .” Иң-иң матуры” Л.Толстой. | 13.05.23 | |
| 61 | “ Өс ҡыҙ”(Татар халыҡ әкиәте) | 14.05.24 | |
| 62 | “Минең әсәйем кем? “ Ф.Ғөбәйҙуллин | 15.05.24 | |
| 63 | Матурлыҡ донъяһына сәйәхәт. «Бәхәс”. Н.Игеҙйәнова. | 20.05.24 | |
| 64 | “ Тәрбиәһеҙ өйрәк“Р.Ниғмәтуллин. | 23.05.24 | |
| 65 | “ Аҡ таçмалы Зөһрә“Б.Байым | 24.05.24 | |
| 66 | Йомғаҡлау. | 24.05.24 | |